# Әҫәр нисек тыуа?

*Нәфис әҫәрҙәрҙең нисек тыуыуын яҙыусының үҙенән бүтән берәү ҙә белмәй, әлбиттә. Шулай ҙа уның ижад лабораторияһына үтеп инергә ынтылыуҙар яһала, сөнки теге йәки был әҫәрҙе тулыраҡ аңларға, әҫәрҙә һүрәтләнгән осорҙоң, хәл-ваҡиғаларҙың асылын аңларға тырышыуҙан килә ул. Яҙыусыларҙың ижад лабораторияһы тураһында тотош әҙәбиәт бар башҡа халыҡтарҙа. Урыҫтарҙа, мәҫәлән. Беҙҙә иһә был йәһәттән тәүге ҙур һәм ҡыйыу аҙымды академик Ғайса Хөсәйенов яһаны. Уның «Ижад серҙәре» тигән китабы уҡыусыларға таныштыр ҙа. Арҙаҡлы ғалимыбыҙ: «...әҙәбиәттең бар айышын аңлатып, ижад серҙәрен асып бөткәнем юҡ әле,» — тиһә лә, быға ынтылыш, яҙыусыларҙың ижад лабораторияһы менән ҡыҙыҡһыныу һәр ваҡыт булырға тейеш, сөнки был беҙҙең аң даирәбеҙҙе үҫтерә, кешенең гармоник үҫешенә булышлыҡ итә.*



*Танылған яҙыусы Рәшит Солтангәрәевтың ижад лабораторияһына ҡағылышлы үҙ яҙмаларын тәҡдим итәбеҙ. «Тыуған йорт» китабына ингән хикәйәләр хаҡында» тип атала ул.*

*Миңниса Баһуманова.*

## «Тыуған йорт» китабына ингән хикәйәләр хаҡында

**«Тыуған йорт»** хикәйәһе

Тыуған ер, тыуған йорт... Былар минең ижадымдағы төп тема. Был хикәйә иң тәүге етди әҫәрем. Бала саҡтан уҡ борсоған проблемалар.

Булған фактҡа нигеҙләнеп яҙылды. Хатта прототиптың исеме лә саҡ ҡына үҙгәртелде — Ғибаҙулла урынына Ғөбәйҙулла. Әҫәр радио аша уҡылғас та, баҫылып сыҡҡас та ауылда шау-шыу тыуҙырған. Теге Ғибаҙулланың күҙен дә астырмайҙар икән, көлөп. Прототибы эсеп алып мине туҡмаҡлап алырға ла йөрөнө, тик ҡыйыулығы етмәне. Аҙаҡ «зато мин тарихта ҡалдым» тип маҡтанып йөрөнө.

М.Сәғитов хикәйәгә дөрөҫ баһа биргән, тик «лирик тойғо» тигәне генә артығыраҡ һымаҡ.

Ғөмүмән, был хикәйәнең уҡыусыға тәьҫире ҙур булды — башҡа яҡтарҙан да ишетелде. Ул саҡ хикәйәләр һирәк яҙыла ине.

**«Үҙ һүҙле ҡыҙ»**

Юлда шулай булған хәл нигеҙендә яҙылды. Ҡыҙҙың егеткә килеүе уйҙырма. Йәштәр яратып ҡабул итте хикәйәне.

**«Иҫке дуҫтар»**

Телевидениела эшләп йөрөгән саҡтарҙа яҙылды. Прототибы беҙҙең телестудия директоры Ғәли Харисович Ғүмәров. Элек министр булған. Уның байҙарса ҡыланыштары беҙҙең бер ҡатлы, гөнаһһыҙ йәштәр өсөн ят ине.

М.Сәғитов «логика етмәй» тигән, етмәһә етмәгәндер, тәжрибә юҡ саҡ.

**«Аҡбәкәл»**

Хрущев заманында аттарға ҡырғынлыҡ килде. (Хатта кәзәләрҙе бөтөрҙөләр). Хөкүмәт ҡарарҙары менән атты бөтөрҙөләр. Ат итенә сусҡа ите ҡушып колбаса яһанылар, халыҡ уны «Дружба» тип атаны.



10-2001.p65 174 02.11.01, 15:30

Беҙҙең ауылда ла йыйылыш булды. Совхоз директоры Мәксүтов (әҫәрҙә Мәсәғүтов) Ҡыҙырғәли тигән берәүҙең атын һатырға йә дәүләткә тапшырырға мәжбүр итте.

Ҡыҙырғәли ағай конюх ине. Был хикәйә шул хәлдең тәьҫирендә яҙылды. Ғөмүмән, мин аттарҙы бөтөрөүгә ҡаршы инем, йәнем әсей ине. Бер мин генә лә түгел.

Айтматов та «Хуш, Гөлһары» повесын шул шауҡымда яҙғандыр. Әммә миңә был әҫәрҙең тәьҫире булманы. М.Сәғитов әйткәненсә. Ул повесты уҡымағайным да шикелле. Ә әҫәрҙәге бәләкәй малай — үҙем.

**«Көҙгө юлда»**

Нигеҙҙә уйлап сығарылған хикәйә. Мәгәр заманының сағылышы. М.Сәғитов дөрөҫ баһалаған.

**«Юл кешеләре»**

«Юлъяҙмаға оҡшап ҡала» тигән М.Сәғитов. Килешәм, бәлки шулайҙыр. Нигеҙендә булған хәл ята. Мин, хәбәрсе булараҡ, юлда күп йөрөнөм, шуға ла күп хикәйәләр юл менән бәйле. Был хаҡта Ф.Иҫәнголов та әйткәйне.

Эш юлъяҙмала түгел. Мин көслө характерҙы күрһәтергә теләгәйнем. Әйтергә теләгәнем: ошондай хәтәр, безвыходный, экстремаль хәлдәрҙә көслө кеше генә алып сыға халыҡты бәләнән, шәхес, герой кәрәк. (Һуғыш, революция йылдары). Үҙемсә ҙур фәлсәфә һалырға иттем. Күрәһең, биреп еткерә алмағанмын. Характер күрһәтергә ынтылған тәүге хикәйәләремдең береһе.

**«Һиҙиәт ағай»**

Үҙебеҙҙең ауыл, үҙебеҙҙең тәбиғәт, үҙебеҙҙең ауыл кешеләре күренә. Нигеҙҙә булған хәлдәр. Һиҙиәттең прототибы — Һибәт тигән кеше. Күлдән балыҡ баҫтырыуы ла булған хәл. Һибәт ағай ҙа үпкәләп йөрөнө. Муллайән, Мырҙағәли үҙ исемдәре менән алынған. Әлбиттә, фантазия бар.

**«Шкаф»**

Хикәйәне яҙыуға Рәми Ғариповтың бер һүҙе сәбәпсе булды. Нинйәйҙер хикәйәмде тикшереп ултырғанда, «Кешенең ниҙелер үҙ кинәнесе, яратҡаны өсөн генә эшләүе мөмкин бит әле», — тигәйне.

Шкаф яһау хәле — уйҙырма. Ә Муллағәли бабай бар ине, ысынлап та оҫта ине. Ул әллә кем булып йөрөнө. Әбейе генә, ниңә минең исемде үҙгәрттең, тип үпкәләне.

Бөтә был хикәйәләрҙе асылда бик яраттылар.

М.Сәғитов минең ошо йыйынтыҡҡа рецензия яҙғайны, фекерҙәрен шуға теркәп ҡуям.

*Р.Солтангәрәев.*

*30/V — 1996.*



10-2001.p65 175 02.11.01, 15:30